# "Әсәләр нур сәсәләр" исемле кисә

**Максаты:** уҡыусыларға әсәйҙәр яҡын ,изге,ҡәҙерле кеше барлығын төшөндөрөү;
Укыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү;
әсәйҙәргә ҡарата хөрмәт,яратыу һәм ихтирам хистәре тәрбиәләү.

**Альфинур**
Тыуырына бер көн ҡалған бала Алланан һораған: "Мин иртәгә ерҙә буласаҡмын тиҙәр. Мин унда нисек йәшәрмен, мин бит бәләкәй һәм ярҙамһыҙ." Алла әйткән: "Мин һиңә, һине көтөп тороусы һәм һинең турала ҡайғыртыусы бер фәрештә бүләк итермен". Бала уйлаған һәм яңынан телгә килгән: "Һинең янда мин йырлайым һәм көләм. Бәхет өсөн миңә шул еткән". Алла: "Һинең фәрештәң бары һинең өсөн генә йырлар һәм көләр, һин уның мөхәббәтен тойоп бәхетле булырһың". "О, мин уны нисек аңлармын, мин бит уның телен белмәйем. Ә һиңә мөрәжәғәт иткем килһә мин ни эшләрмен" - тигән бала. Алла әкрен генә баланың башынан һыйпап: "Һинең фәрештәң һиңә доға өйрәтер. Шул доға аша беҙ һинең менән аралашырбыҙ". Унан һуң бала һораны: " Ер йөҙөндә яуызлыҡ бар тип ишеттем. Мине кем һаҡлар". "Үҙ тормошон ҡыҙғанмайса, фәрештәң һине һаҡлар" - тине Алла. "Һине күрмәгәс, миңә бик яманһыу булыр." "Фәрештәң һиңә минең турала һөйләр. Мин гел һинең янында булырмын." Шул саҡта Ер йөҙөнән тауыш ишетелде һәм бала һораны: "Аллам, фәрештәмдең исемен әйтсе!" Алла тыныс ҡына тауыш менән: "Уның исеме бик ябай ғына - Әсәй" - тине.

“**Ләйсән ямғыры”нан әкрен генә көй уйнай**.

Тантана бөгөн ерҙә,
Һәр кешенең йөҙөндә.
Шатлыҡ урғый йөрәктән,
Нур һибелә күҙҙәрҙән.
Бөгөн һоҡланғыс байрам-
Әсәйҙәребеҙ көнө.
Әсәй бит ул һәр кешегә
Ғүмер бүләк итеүсе.
Әсәй тиеп әйтеү менән
Донъя нурға күмелә.
Ябай ғына был һүҙҙән
Мәрхәмәтлек бөркөлә.
Әсәйҙәрҙе ҙурлайыҡ,
Әсәйгә дан йырлайыҡ!

Әсәй, һинең изгелекте
Йән түрендә һаҠлайбыҘ.
Бөгөн – ӘсәйҘәр көнө
Байрам менән Ҡотлайбыҙ.

Төн йоҠоңдо Ҡалдырып,
Тәрбиәләп үҪтерҘең.
Тормош юлын үтер өсөн
ҠаҠшамаҪлыҠ көс бирҘең.

Өҫ-башымды Ҡарайһың,
Ҡурсалайһың һалҠындан.
Ҡош балаһы шикелле
Һәр саҠ һиңә талпынам.

ЙоҠонан уятаһың,
Сәстәремдән иркәләп.
Көн болотло булһа ла,
БалҠып тора иртәләр.

Бөтә кеше хөрмәт итә
Яуаплыһың эшеңә.
Күпме мәшәҠәт төшә
Көн дә әсәй кешегә!

Ауырыһам – дауалай
Күңел төшһә, күтәрә.
Шатлығымды, Ҡайғымды
Йөрәгенән үткәрә.

**Миляуша**

Әсәй-ерҘә иң ғәзиз,иң якын кеше,сөнки ул һине тыуҘырған,кукрәк һөтөн имеҘгән,йыр көйләп бишектә тибрәткән,беренсе йылмайыуыңды күреп Ҡыуанған,туған телде өйрәткән,халык моңон күңелеңә һеңдергән.ӘсәйҘәрҘең һиңә Ҡылған изгелеген һанап бөтөрөү мөмкинме һуң?

Көндөң яҠтылығы-Ҡояшта,
Күктең матурлығы-йондоҘҘарҘа,
ЕрҘең гүзәллеге-Ҡатын-ҠыҘҘарҘа.

ҺеҘҘе бөтөн ер йөҘөн биҘәгән ӘсәйҘәр байрамы менән тәбрикләйбеҘ.

Ҡəҙерләйеҡ беҙ əсəйҙəрҙе,ололайыҡ! Уларҙың ҡанаттары ҡайырылмаһын, тормош ауырлыҡтарынан иңдəре һығылып төшмəһен!Ҡатын-ҡыҙ һəр вакытта ла ҡатын-ҡыҙ булып ҡалһын!

**Гузалия:**

-Әсəй!Күпме наҙ бар был һүҙҙə.”Әсəй” тиеп телебеҙ асыла.Беренсе аҙымдарыбыҙҙы күреп ғəзиз əсəйҙəребеҙ һөйөнə. Беҙҙең иң якын кəңəшсебез,серҙəшсебеҙ ул!
-Аллаһы Тəғəлə ҡатын-кыҙҙы йомшаҡ тəбиғəтле,һүҙсəн,нəфис,хиссəн итеп яралтҡан һəм гүзəл заттарға ғаиләләге иң яуаплы,сетерекле вазифаны - бала тəрбиəлəүҙе йөкмəткəн.Ҡатын-ҡыҙ- иң элек əсə һəм ғаилə усағын һаҡлаусы ул.

**Әлиə**

Әсə бөйөк исем
Нимə етə əсə булыуға
Ҡатындарҙың бөтə матурлығы,
Сибəрлеге əсə булыуҙа.
Әсəлəрҙең күңелдəре балаларҙа,
Бала күңеле, тиҙəр, далала
Тик онотмайыҡ шуны:ике килмəй
хеҙмəт итеү ата-əсəйгə.

**Лəйсəн**

Әсə!
Йөрəгемдең иң ҡəҙерле хисе,
Күңелемдең ул иң түрендə;
Ул-һалҡында йылытыусың һинең,
Йыуанысың ауыр көнөңдə.
Һоҡланып ҡарап торорлоҡ-
Күҙҙе ала алмайбыҙ.
Әсəйҙəрҙең бөйөклөгөн
Йəшəй-йəшəй аңлайбыҙ
Айҙан,ҡояштан ҡəҙерле
Һин ул əсəйем!
Иң яғымлы,иң һөйкөмлө
Һин ул əсəйем!
Таңдар ҙа нурлыраҡ,
Көндəр ҙə йылыраҡ,
Күңел дə йылыраҡ,
Янда һин булғанда.

**Гөлназ**

- Донъяның рәхәтен, тормоштоң михнәтен, күңелдең сафлығын, намыҫтың паклығын аңларға өйрәтеүсе, үҙ йәне аша уҙҙырып, күкрәк һөтө менән Иман иңдереүсе әсәй.Беҙ сырхаулап ятҡанда, күкрәгенә ҡыҫып ,....йән емешем, балам, тип, ысын күңелдән борсолоусы әсәйебеҙ.Әсәй булмаһа, беҙ ояһыҙ ҡош, моңһоҙ йыр, йырһыҙ һандуғас кеүек йәшәр инек, тормошобоҙҙоң йәме лә, тәме лә булмаҫ ине.

**Гөлфиә**
Ғумерем буйына
Бурыслы мин уға
Көслө һин, изге һин
Бөйөк һин, әй-әсә!
Йығылып илаһам,
Абынып тормаһам,
Ҡулыңды һуҙыусы
Һин генә әсәйем!

**Азалия**
Рәхмәт яуһын беҙҙең әсәйҙәргә
Уларғалыр бөтә ауырлыҡ
Әсәйҙәргә яҡты йондоҙҙарҙан
Йә ҡояштан һәйкәл һалырлыҡ.
Һеҙгә булған беҙҙең хөрмәтебеҙ
Урын алһын йөрәк түрендә.
Шатлыҡ һәм ҡыуаныс, ҙур бәхеттәр
Юлдаш булһын һеҙгә ғумергә.

**Оксана**
Һинән дә яктыраҡ
Һинән дә якшыраҡ
Матурыраҡ кеше юҡ
Бөтә ер шарында.
Китһәм дә ситтәргә
Әсәйем шикләнмә,
Талпынып яныңа
Ҡайтырмын йыраҡтан.
Ни генә булһа ла
Мин һине илатмам.
Һинең күҙҙәреңде
Йәштәргә сылатмам.

**Лира йырлай**

**Алина**
Ниңә бөгөн бөтә ерҙә
Сәскәләр балҡый беҙҙә
Ниңә ҡояш көлөп ҡарай
Беләбеҙ һәммәбеҙ ҙә.
**Әлфинә**
Әсәй!Әсә ерҙә иң кәрәкле кеше.
Әсәйҙәрҙең беләйек ҡәҙерен,
Ел-дауылдан һаҡлап үҫтергән ул,
Ҡызғанмайса бөтөн ғүмерен,
Уның кәңәштәре көс-дәрт өҫтәй,
Илһам бирә миңә йәшәргә,
Бәхет-шатлыҡ менән һәр саҡ яҙһын
“Әсәй”тиеп уға әйтергә.

**Нурзиля** Хөрмәтле әсәйҙәребеҙ!Һеҙ-тыйнаҡ та,һөйкөмлө лә, һеҙ-эшсән дә,түҙемле лә, һеҙ-иманлы ла, дарманлы ла. Һеҙ өйҙәребеҙҙең йәме,аштарыбыҙҙың тәме.Донъя йөгөн һеҙ күтәргәнһегеҙ , ғаилә усағын һүндермәйсә, һүрелдермәйсә, һеҙ дөрләтеп тораһығыҙ.

**Миляуша**

Көндәр яҡты булһын өсөн Әсәй кәрәк!
Йоҡо татлы булһын өсөн Әсәй кәрәк!
Ел-ямғырҙан яҡлар өсөн Әсәй кәрәк!
Донъя йәмле булһын өсөн Әсәй кәрәк!
Аштар тәмле булһын өсөн Әсәй кәрәк!
Беҙҙең көндәр яҡты булһын өсөн Әсәй кәрәк!

**тәрбиәсе**

Әсә һәм бала!Улар бер бөтөн,айырылғыһыҙ.
Ҡәҙерле әсәләр!Был бер бөтөнлөк,бергәлек балағыҙ үҫкән һайын тағы ла нығыһын,бер-берегеҙҙе бер һүҙҙән, бер ҡараштан аңлап, бәхеттә йәшәргә яҙһын.
Байрамыбыҙҙа ҡатнашыуығыҙ өсөн барығыҙға ла рәхмәт.Һеҙҙе тағы бер ҡат байрам менән ҡотлайбыҙ! Әсәләр көнөнә арналған концертыбыҙ аҙағына ла етте.Хөрмәт итеп килеүегеҙ өсөн ҙур рәхмәт. Һеҙгә киләсәктә һаулыҡ, оҙон ғүмер, ғаилә бәхете теләп ҡалабыҙ. Һау булығыҙ!!!